***Февраль айында башҡорт королтайҙары үҙ эшмәкәрлеген айырыуса йәнләндерҙе. Был осорҙа Пермь өлкәһенең Ҡуеда районында, Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында шундай ҡорҙар булып үтте. Стәрлетамаҡ ҡалаһы башҡорттарының сираттағы отчет-һайлау королтайы материалдары менән тулыраҡ таныштырып китмәксебеҙ.***

# ЙЫЙЫН ЙЫЙҘЫ СТӘРЛЕ

Стәрлетамак башҡорттары ҡоролтайы XXI быуатҡа аяҡ баҫҡан көндәрҙә үҙе атҡарған эштәргә байҡау яһап, киләсәккә пландар билдәләне. 8 февралдә ҡала ҡоролтайы башҡарма комитеты атҡарған эштәре хаҡында хисап бирҙе. Йыйынға тирә-йүндәге районҙарҙың ҡоролтай рәйестәре, төрлө милли-мәҙәни үҙәктәр һәм ойошмалар етәкселәре, мәғариф хеҙмәткәрҙәре саҡырылғайны. Унда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.А.Мәжитов, уның урынбаҫары Ә.А.Fәйфуллин, Башҡарма комитет ағзалары, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе, филология фәндәре докторы Ф.F.Хисамитдинова, БДПУ доценты Р.Х.Ниғмәтуллин, медицина фәндәре докторы М.Т.Юлдашев, «Мәрхәмәт» Өфө хәйриә йәмғиәте рәйесе Г.Б.Нуриәхмәтова, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының федерация, милли һәм миграция сәйәсәте буйынса министрлығының төбәк органы етәксеһе урынбаҫары Р.Б.Шәйхисламов һ.б. ҡатнашты.

Көн тәртибенә дүрт мәсьәлә ҡуйылғайны.

1. Стәрлетамаҡ ҡала ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе В.Ә.Иҫәнголовтың отчеты.

2. Ҡоролтай башҡарма комитеты ағзаларының сығышы.

3. Ҡоролтай башҡарма комитеты ағзаларын һайлау.

4. Ҡоролтай башҡарма комитетының яңы рәйесен һайлау.

Конференция әүҙем шарттарҙа үтте. Ҡоролтай Башҡарма комитеты рәйесе башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһап ҡына ҡалманы, алда торған бурыстарға ла ҙур иғтибар бүлде. Башҡарма комитет ағзалары ла үҙҙәрен борсоған проблемаларға нығыраҡ туҡталды. Әйтәйек, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһе алғы планға ҡуйылды. Был йәһәттән Стәрлетамаҡ ҡалаһында һәм районында байтаҡ эш башҡарылған. Конференция алдынан унда ҡатнашыусылар өсөн махсус ойошторолған сара буйынса ҡунаҡтар ҡалалағы балалар психоневрологик диспансерында, 62-се башҡорт балалар баҡсаһында, башҡорт-төрөк лицейында, 3-сө гимназияла һәм педагогия колледжында булды һәм уларҙа уҡыу-уҡытыу барышы менән таныштı. Конференция ҡунаҡтарын иң элек башҡорт телен, туған телдәрҙе өйрәнеү торошо ҡыҙыҡһындырҙы.

Конференцияла ҡатнашыусылар Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.А.Мәжитовтың, Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәте башлығы С.F.Әхмәтовтың, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе Ф.F.Хисамитдинованың һ.б. ялҡынлы сығыштарын ихлас тыңланы. Журнал уҡыусыларға уларҙың сығыштары айырым тәҡдим ителә.

Конференция Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡоролтайының яңы башҡарма комитетын һәм уның рәйесен һайланы. Башҡарма комитет рәйесе итеп химик-технология техникумы директоры Р.А.Дәминев һайланды.